Башҡортостан Республикаһы Сибай ҡалаһы ҡала округының
“Сулпылар”берләштерелгән балалар баҡсаһы
муниципаль мәктәпкә тиклемге белем биреү бюджет учреждениеһы

# Башҡорт балалар баҡсаһында белем эшмәкәрлеге системаһын камиллаштырыу буйынса проект эше “Тел-милли рух тәрбиәләү нигеҙе”

Сибай - 2021

«Бала әхләҡи тәрбиәне, йәғни нимә яҡшы, нимә насар, тигән төшөнсәне әсә һөтө менән түгел, ә туған телен үҙләштереү процесында ала»

С. Л. Соловейчик.

Донъяла кеше бер үҙе генә йәшәй алмай, ул башҡа кешеләр менән аралашыуға мохтаж. Телһеҙ аралашып, аңлашып та булмай. Телһеҙ шәхестең, кешелек йәмғиәтенең, фәндең, мәҙәниәттең үҫеше мөмкин түгел. Тел аша оло быуын йәш быуынға үҙенең тормош тәжрибәһен, өгөт - нәсихәттәрен, рухи байлығын тапшыра килгән. Фәҡәт тел аша ғына үткәнебеҙҙе, бөгөнгөбөҙҙө, киләсәгебеҙҙе аңлайбыҙ. Бының өсөн һәр яңы быуын әсә телен яҡшы белергә, өйрәнергә тейеш.

Туған телде өйрәнеү - ул Рәсәй Федерацияһы Конституцияһы билдәләгән хоҡуҡ. Һәр халыҡ үҙенең мәҙәниәте, тарихы, традициялары, ғөрөф – ғәҙәте менән танылa һәм үҫешә.

Башҡорт теле 2009 йылда, ЮНЕСКО тарафынан сығарылған "Донъяның хәүеф аҫтында булған телдәре атласына индерелеп, «көсһөҙ» статусы алғайны — «балаларҙың күпселеге үҙ телендә һөйләшә, әммә уны ҡулланыу даирәһе сикләнеүе ихтимал (мәҫәлән, бары тик көнкүрештә генә)». Милли белем биреү мәсьәләләре яңы заман белем биреү сәйәсәтендә өҫтөнлөк ала. Башҡорт теленең һығылмалылығы, матурлығы, төрлө яҡлылығы тураһында М.Кәрим, Р.Ғәрипов, З. Биишева, Б.Бикбай кеүек башҡорт яҙыусылары һәм шағирҙары бик күп һөйләнеләр һәм шиғырҙар ижад иттеләр.

Бала кесе йәштән үк әсә телен күңеленә һеңдерһә, бишек йырҙарын, халҡыбыҙҙың хазинаһы - әкиәттәребеҙҙе тыңлаһа, “боронғолар һүҙе” - йомаҡ, мәҡәлдәрҙе ишетеп үҫһә, башҡорт рухлы булып үҫәсәк. Шулай уҡ баланы ауыҙ-тел ижады менән таныштырыу уның телмәрен, аң-зиһенен үҫтереү өсөн дә бик уңышлы алымдарҙың береһе.

Сибай ҡалаһының “Сулпылар” балалар баҡсаһы милли төҫ алып тора, белем – тәрбиә эше тик туған башҡорт телендә генә алып барыла. Балалар баҡсаһы туған тел аша рухлы, әхлаҡлы шәхес тәрбиәләү маҡсатын һәм балаларҙың туған телендә телмәрен үҫтереүҙе төп бурыстарының береһе итеп ҡуя.

Бала беренсе тапҡыр балалар баҡсаһы тупһаһы аша үткәс тә, беҙҙең тәрбиәселәр балаға саф башҡорт телендә өндәшеп, ҡаршы алалар. Балалар баҡсаһында булған осорҙа бала туған телендә һөйләшеп, аралышып үҫһен өсөн уңайлы шарттар булдыралар .

Ләкин, мәктәпкәсә йәштәге балаларға тел ҡәҙерен белергә өйрәтеү тәрбиәселәрҙән генә тормай, ә ғаилә һәм йәмғиәттең йоғонтоһо ла бында ҙур роль уйнай. Һуңғы йылдарҙа Республика, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы, белем биреү ойошмалары тарафынан башҡорт телен тергеҙеүгә күп көс һалына. Быға ҡарамаҫтан, йәш быуын ата - әсәләре башҡорт теленән ситләшә, ғаиләлә үҙ - ара туған телендә аралашмай. Шуға ла туған телде өйрәнеүгә ылыҡтырыусы төрлө педагогик һәм методик алымдарҙы булдырыу, традицион методтарҙы файҙаланып, яңы оригиналь методика, педагогик система булдырыу “Сулпылар” балалар баҡсаһында **актуаль проблема** булып тора.

Актуаль проблемаға таянып, балалар баҡсаһы педагогтары түбәндәге маҡсат һәм бурыстар ҡуйҙы:

**Маҡсат:** Мәктәпкәсә йәштәге балаларҙы туған тел аша рухлы, әхлаҡлы шәхес итеп тәрбиәләү.

**Бурыстар:**

- Балаларҙа тыуған илгә, башҡорт теленә ҡарата һөйөү, ихтирам. ғорурлыҡ тойғолары уятыу.

- Балаларҙың телмәрен халҡыбыҙҙың мәҡәл - әйтемдәре, нәфис әҙәбиәте, йыр - моңдары аша байытыу.

- Башҡорт халҡының ғөрөф - ғәҙәттәре, кәсептәре аша мәҙәни – тарихи ҡыҙыҡһыныуҙы арттырыу, балаларҙы милли рухта тәрбиәләү.

- Башҡорт теленә һөйөү тәрбиәләүҙә ата – әсәләрҙе белем - тәрбиә биреү эшмәкәрлегенә йәлеп итеү, берлектә башҡорт халыҡ байрамдары, конкурстар һәм башҡа ижади эшмәкәрлектәр ойоштороу.

**Проекттың төрө:** ижади.

**Проектты тормошҡа ашырыу ваҡыты:** 01.09.2020 – 31.05.2021

**Проектты тормошҡа ашырыу этаптары.**

**Әҙерлек этабы:** темаға ярашлы бөйөк педагогтарҙың хеҙмәтен өйрәнеү, мәғлүмәт йыйыу (кәрәкле әҙәбиәт уҡыу, төрлө сығанаҡтар менән танышыу, һорауҙарға яуап алыу). яңы технологиялар, алымдар үҙләштереү; балалар, ата – әсәләр, педагогтар менән  эш системаһын төҙөү; ата – әсәләр, балалар менән эш өсөн педагогик ҡумта әҙерләү; "Тел асҡысы – халыҡта!" темаһына ата –әсәләр йыйылышы үткәреү; проектты тормошҡа ашырыу өсөн төркөмдәрҙә  кәрәкле шарттар булдырыу.

**Төп этап:** Перспектив эш планына ярашлы  балалар менән саралар ойошторорға; ата – әсәләр менән әңгәмәләр, консультациялар үткәреү; сараларға ата – әсәләрҙе йәлеп итеү; "Тел – милли рух тәрбиәләү нигеҙе"  проекты буйынса системалы эш алып барыу.

**Йомғаҡлау этабы:** Мәктәпкәсә йәштәге балаларға әхлаҡи – рухи тәрбиә биреү буйынса  методик ҡулланма сығарыу.

**Әхлаҡи – рухи тәрбиә биреүҙә ҡулланылған белем биреү эш формалары.**

- Ойошторолған белем биреү эшмәкәрлеге;
- байрамдар һәм күңел асыу саралары;
- төркөмдәрҙә предметлы – арауыҡлы үҫеш мөхитен булдырыу;
- балалар баҡсаһының тыуған яҡты өйрәнеү музейын тулыландырыу;
- ҡала тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейына экскурсия;
- ҡала  урамдары буйлап иҫтәлекле урындарға  маҡсатлы прогулкалар;
- ата – әсәләр менән бәйләнеш: ғаиләләр менән  ижади эшмәкәрлектәр, йыйылыштар.

**Әхлаҡи – рухи тәрбиә биреүҙә ҡулланылған ысулдар һәм алымдар.**

- Һүҙ ысулы: әңгәмә, нәфис әҙәбиәт уҡыу, йомаҡтар ҡойоу, һанашмаҡтар, тиҙәйткестәр өйрәнеү.
- Күргәҙмә ысулы: фотолар, картиналар, иллюстрациялар, репродукциялар, ҡарау, презентация, виртуаль экскурсиялар.
- Практик ысул: викториналар, конкурстар, квест – уйындар, тематик байрамдар, маҡсатлы экскурсиялар, художестволы ижади эштәр: һүрәт төшөрөү, әүәләү, йәбештереү, сәхнәләштереү,  хәрәкәтле уйын, йырлы – бейеүле уйындар,

**Әхлаҡи – рухи тәрбиә биреүҙә ҡулланылған технологиялар.**

**1. ИКТ технологияһы.**

Педагогтар белем биреү эшмәкәрлегендә “Башҡорт халҡының боронғо көнкүреше”, “Башкортостан тәбиғәте”, “Башҡортостандың ете мөғжизәһе”, “Солоҡсолоҡ”, “Ҡымыҙсылыҡ” презентациялары ҡулланалар, виртуаль экскурсиялар ойошторалар: “Сибай ҡалаһының тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы”, “Сибай ҡалаһының урамдары”, “Сибай карьеры”, “Ғәҙелша шарлауығы”.

**2. Тикшеренеү эшмәкәрлеге** (проблемалы мәсьәләләр ҡуйыу һәм уларҙы сисеү).

Мәҫәлән, “Тыуған илем – хазиналар иле” исемле проект эше. Бының өсөн күп төрлө материал йыйҙыҡ: таштар коллекцияһы, таштар тураһында һүрәттәр һ.б. Тыуған илем хазиналары тураһында әңгәмәләр, ойошторолған белем биреү эшмәкәрлектәре үткәрҙек. Балалар менән таштарҙың үҙенсәлектәрен тикшереп ҡараныҡ, уларҙы буяныҡ, һүрәттәр төшөрҙөк. “Малахит” магазинына экскурсия ойошторҙоҡ.

**3. Һаулыҡ һаҡлау технологияһы.**

“Сулпылар” балалар баҡсаһында мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың һаулыҡтарын һаҡлауға айырым ихтибар бүленә.

- *Һаулыкты һаҡлау һәм дәрт, стимул биреү технологияһы*: ритмопластика, динамик паузалар, хәрәкәтле һәм спорт уйындары, релаксация, бармаҡ уйындары, күҙ өсөн гимнастикалар, тын алыу гимнастикалары, йоҡонан торғас гимнастика.
- *Сәләмәт тормош алып барыуға өйрәтеүсе технология*: иртәнге гимнастика, физик культуранан ОББЭ, танып – белеү буйынса ОББЭ “Мин һәм минең тәнем”, “Минең организмым”, “Күҙҙәр” һ.б., үҙ – үҙеңә массаж эшләү, күңел асыу саралары, байрамдар. Майҙансыҡта спорт ҡоролмаларында шөғөлләнеү.
- *Коррекциялау технологиялары:* артикуляционная гимнастика, әкиәт терапияһы, тренажер ҡулланыу, сенсорик юлдар – яҫытабанлыҡты коррекциялай, төҫ терапияһы, “ҡоро ямғыр”.

**4. Уйын технологияһы.**

Педагогтар региональ компонентка ярашлы дидактик уйындар ҡулланалар: “Башкортостандың флагын йый”, “”Башҡорт халыҡ кейемдәрен тап”,

“Ҡалабыҙҙың иҫтәлекле урынын әйт”, “Нимә артыҡ?” “Өҫтәл әҙерләйбеҙ” , “Башҡорт халыҡ һауыттары”, “Тирмә төҙөү”, “Орнаменттар менән биҙә”

**5. Музей педагогикаһы ҡулланыу.**

2020 йылда балалар баҡсаһында мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың күңелендә халҡыбыҙҙың тарихына һәм мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыу, һөйөү, ихтирам тәрбиәләү маҡсатында тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейы асылды. Музейҙа кескәйҙәр үткән дәүерҙең көнкүреш әйберҙәре, боронғо кейемдәр, декоратив – ҡулланма сәнғәте менән танышалар.

**6. Ата-әсәләр менән бәйләнеш.**

Ата – әсәләр менән берлектә проект эшмәкәрлеге алып барылды. Ижади тикшеренеү эштәренең һөҙөмтәһе итеп альбомдар эшләнелде: “Ғаилә гербы”, “Минең шәжәрәм”, “Ҡала урамдары буйлап”.

**“Сулпылар” балалар баҡсаһының**
**әхлаҡи – рухи тәрбиә биреү буйынса**
**перспектив планы**

| Үткәреү ваҡыты | Балалар менән эш | Ата-әсәләр һәм социум менән эштәр |
|---|---|---|
| Сентябрь | - Әңгәмә “Сибайым – тыуған ҡалам, “Балалар баҡсаһы”, “Минең ғаиләм”<br>- “ Сөмбөлә” байрамы<br>- Виртуаль экскурсиялар ойоштороу: “Сибай ҡалаһының урамдары”, “Сибай карьеры”, “Иҫтәлекле урындар” | Анкета тултырыу “Мәктәпкәсә йәштәге балаларға әхлаҡи - рухи тәрбиә биреү” |
| Октябрь | - Тыуған ил тураһында әңгәмә үткәреү<br>- Һүрәттәр конкурсы “Башкортостан - ғәзиз ерем!”<br>- Шиғыр һөйләүселәр бәйгеһе “Минең Ватаным”<br>- Республика көнөнә арналған иртәлек “Сәскә ат, гүзәл Башкортостан!”<br>- Презентация ярҙамында балаларҙы башҡорт халҡының шөғөлө менән таныштырыу (умартасылыҡ, ҡымыҙсылыҡ, малсылыҡ, һунарсылыҡ)<br>- Башҡортостан буйлап виртуаль | - Педагогтар өсөн консультация “Мәктәпкәсә йәштәге балаларға әхлаҡи – рухи тәрбиә биреүҙә системалылыҡ һәм эҙмә – эҙлеклелек”<br>- Балалар, ата – әсәләр менән берлектә тарих һәм тыуған яҡты өйрәнеү музейына экскурсия |

| | | |
|---|---|---|
| | экскурсиялар<br>- Тирмә макеты эшләү<br>- Дидактик уйындар: “Башкортостандың флагын йый”, “”Башҡорт халыҡ кейемдәрен тап”, “Ҡалабыҙҙың иҫтәлекле урынын әйт”, “Нимә артыҡ?” “Өҫтәл әҙерләйбеҙ” , “Башҡорт халыҡ һауыттары”, “Тирмә төҙөү”, “Орнаменттар менән биҙә” | |
| Ноябрь | - Халыҡтар берҙәмлеге көнөнә арналған иртәлек<br>- Икмәк ҡәҙере тураһыда әңгәмә<br>- “Икмәк – тормош сығанағы” - мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә асыҡ ОББЭ<br>- Әсәләр көнөнә бүләктәр әҙерләү<br>- “Мәңге йәшә, әсәкәйем!” байрамы | - Әсәләр көнөнә арналған байрамда ҡатнашыу<br>- “Әлли – бәлли, итер ул!”<br>бишек йыры конкурсы<br>- Педагогтар өсөн консультация “Мәктәпкәсә йәштәге балаларға әхлаҡи – рухи тәрбиә биреүҙә предметлы – арауыҡлы үҫеш мөхите”<br>- “Тел асҡысы – халыҡта!” темаһына ата – әсәләр йыйылышы үткәреү |
| Декабрь | - Башҡорт теле көнөнә арналған айлыҡ (месячник) үткәреү<br>- Башҡорт теле көнөнә арнап байрам ойоштороу “Иле барҙың - теле бар!”<br>- Йырлы - бейеүле түңәрәк уйындары<br>- Башҡорт халыҡ хәрәкәтле уйындары көнө<br>- Балалар араһында “Һаумы, һаумы әкиәт!” бәйгеһе | -“Быуындар бәйләнеше” темаһына шәжәрә күргәҙмәһе<br>-“Ағинәйҙәр” ҡоро ағзалары менән берлектә “ Иле барҙың - теле бар!” байрамы |
| Ғинуар | -“Китап – белем шишмәһе” – әңгәмә<br>- Төркөмдәрҙә башҡорт балалар яҙыусыһына арналған тематик күргәҙмә<br>- Бәләкәй китапсыҡтар эшләү<br>- Байрам “Ҡышҡы Нардуған”<br>- Саф һауала спорт уйындары | - Башҡорт балалар яҙыусылары менән осрашыу<br>- Ата – әсәләр өсөн консультация «Балалар тормошонда китаптарҙың роле»<br>- Балалар китапханаһына экскурсия |

| | | |
|---|---|---|
| | | - Акция “Балалар баҡсаһына китап бүләк ит!” |
| Февраль | - Халыҡ – ара туған телдәр көнө үткәреү<br>-Башҡорт халыҡ геройҙары тураһында әңгәмә<br>- Шаймуратов генерал тураһында мәктәпкә әҙерлек төркөмөндә ОББЭ үткәреү<br>- Малайҙар өсөн «Сулпылар бөркөттәре» конкурсы | - Педагогтар өсөн консультация “Мәктәпкәсә йәштәге балаларға әхлаҡи – рухи тәрбиә биреүҙә ата – әсәләр менән хеҙмәттәшлек”<br>- «Балаларҙы тәрбиәләүҙә халыҡтың ауыҙ - тел ижадын ҡулланыу»<br>ата –әсәләр өсөн консультация<br>- Атайҙар ҡатнашлығында музыкаль – спорт байрамы “Ир – бала илгә терәк” |
| Март | - Иртәлек “Ил биҙәге – ҡатын ҡыҙ”<br>- фотокүргәҙмә “Әсәйем менән бергә”<br>-Театр айлығы:<br>Йәш үҙенсәлектәренә ярашлы әкиәттәр сәхнәләштереү | Әкиәт сәхнәләштереү өсөн декорациялар, костюмдар әҙерләүгә ата – әсәләрҙе йәлеп итеү |
| Апрель | - проект эше “Һаулыҡ – ҙур байлыҡ!”<br>- фольклор байрамы “Нәүрез” | - Ата- әсәләр менән берлектә “Һаулыҡ – ҙур байлыҡ!” проектын тормошҡа ашырыу<br>-Акция “Сыйырсыҡ ояһы” |
| Май | - “Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан герой – яугирҙар” - әңгәмә<br>- “Еңеү көнө” - иртәлек<br>- Ғаилә менән “Үлемһеҙ полк” парадында ҡатнашыу.<br>- “Салауат батыр” – өлкәндәр төркөмөндә ОББЭ<br>- “Һабантуй” байрамы | - “Үлемһеҙ полк” парадында ҡатнашыу<br>- Ата - әсәләр менән берлектә “Һабантуй” байрамы |

**Проекттың көтөлгән һөҙөмтәләре:**

**Балалар өсөн**:

- баланы әхлаҡи – рухи шәхес итеп тәрбиәләүгә шарттар булдырыу, йәш үҙенсәлектәренә ярашлы предметлы – арауыҡлы үҫеш мөхитен байытыу;
- тыуған илдең тарихын, мәҙәниәтен өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу уятыу;
- мили хис – тойғо формалаштырыу;
- балаларҙы бер – береһе менән аралашып, коллективта эш итә белергә өйрәтеү.

**Педагогтар өсөн:**

- мәктәпкәсә йәштәге балаларға әхлаҡи – рухи тәрбиә буйынса педагогтарҙың компетентлығын күтәреү;
- мәктәпкәсә йәштәге балаларға әхлаҡи – рухи тәрбиә биреү буйынса ата – әсәләрҙең һәм педагогтарҙың хеҙмәттәшлеген әүҙемләштереү;
- мәктәпкәсә йәштәге балаларға әхлаҡи – рухи тәрбиә буйынса комплекслы тематик план төҙөү.

**Ата – әсәләр өсөн:**

- Бала үҫтереүҙә ата – әсәләрҙең хоҡуғын ғәмәлләштереү;
- балаларҙың һәм ата – әсәләрҙең мөнәсәбәтен нығытыу.

**Йомғаҡлау.**

Телгә һөйөү тәрбиәләү, ысынлап та, бәләкәйҙән башланырға һәм артабан эҙмә-эҙлекле, маҡсатлы үҫтерелергә тейеш. Туған телде һаҡлау, уны киләсәк быуындарға бар байлығында, бар матурлығында еткереү бурысы һәр кемебеҙҙең иңенә берҙәй тигеҙ бүлеп һалынған. Рух булһа, телебеҙ ҙә, милләтебеҙ ҙә йәшәсәк! Проект өҫтөндә эш дауам итә. Һөҙөмтәләр аҡланыр тип ышанабыҙ.

## Ҡулланылған әҙәбиәт.


1. Азнабаева Ф.Г., Фаизова М.И., Агзамова З.А. Региональная программа «Академия детства» - Уфа, 2016.

2. Азнабаева Ф.Г., Фаизова М.И., Агзамова З.А. Гасанова.Л.Н Гасанова.Р.Х. «Словесное творчество старших дошкольников на основе национальной культуры башкирского народа» -Уфа: ИРО РБ, 2016.

3. Агишева Р.Л. Фольклор и литература Башкортостана. Учебная хрестоматия для детей дошкольного возраста и младшего возраста. Уфа, 2011.

4. ”Башҡортостан - тыуған илем”. Мәктәпкәсә йәштәге балаларға Башҡортостан Республикаһын өйрәнеү прогаммаһы (Төҙөүсеһе Аҙнабаева Ф.Ғ..Әлбәкова Г.Ш., Буранбаева Ә.Р., Мортаева К.Ф.). Өфө, 2017.

5. Галяутдинонов И.Г. Башкирские народные игры (на башкирском и русском языках). –Изд.3-е- Уфа; Китап, 2006.

6. “Йәйғор”. Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн хрестоматия. М.Б.Юлмөхәмәтов, А.Ш.Йәғәфәрова. Өфө: Китап, 2000.

7. Примерная образовательная программа дошкольного образования «От рождения до школы» под редакцией Н. Е. Вераксы, Т. С. Комаровой, М. А. Васильевой, Москва МОЗАИКА-СИНТЕЗ ,2014 .